Йәшлек – 2019 – 22 март – 3-сө бит

**Нуриҙә ИЛҺАМОВА, Әбйәлил районының Асҡар ауылы:**

– Район китапханаһында "Йәйғор ише балҡый "Йәйғор" исемле бик күңелле сара уҙҙы. Ул районыбыҙҙа күп йылдар эшләп килгән халыҡ театры тормошон сағылдырыусы ҡыҙыҡлы, йәнле аралашыуҙар, хәтирәләр кисәһе булды. Осрашыуға, халыҡ театрына нигеҙ һалыусылар менән бергә, хәҙерге артистар ҙа йыйылды. Район мәҙәниәт йортонда үҙешмәкәр театр 1970 йылдарҙа Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Римма Солтанова етәкселегендә ойошторола. Ә 1991 – 1994 йылдарҙа коллективты Фәрзәнә Аратурова етәкләй, тап шул осорҙа улар "халыҡ театры" исемен яулай. Фәрзәнә Хәсән ҡыҙы үҙ иҫтәлектәре менән бүлеште. Шул осорҙағы артистарҙан Ризана Мәжитова ла сығыш яһаны.

2003 йылдан театр коллективын етәкләүсе Илүзә Мөҙәрис ҡыҙының да был йүнәлештә башҡарған эштәре ҙур баһаға лайыҡ. Халыҡ театрҙарының 2015 йылда Бәләбәй ҡалаһында үткән төбәк-ара фестивалендә өсөнсө урын алып, 2016 йылда "Алтын тирмә" телевикторинаһында еңеү яулап ҡайттылар.

Театрҙың тормоштағы әһәмиәтенә иғтибар биреп: "Театр – тормош, йәмғиәтебеҙ көҙгөһө ул", – тигән матур һүҙҙәр әйтелде. Беҙҙең районда ғына биш халыҡ театры эшләй, шуларҙың береһе – беҙҙең "Йәйғор"!